# Беҙҙең студент йылдары

Беҙҙең студент йылдары

Туймазы педагогия колледжының Туған телдәр бүлеге гәзите

Ноябрь № 8, 2011 йыл

## Яңылыҡтар

### *Республика көнө*



Республика көнө – ул илен яратҡан илебеҙ улдары өсөн оло байрам. Был байрам беҙҙең колледжда йыл да үткәрелә. Бына быйыл да, матур шиғри юлдар менән башланып китте Башҡортостандың тыуған көнөнә арналған кисәбеҙ. Кисәнең тәүге өлөшөндә ҡотлау өсөн һүҙ колледж директоры Казаков А.М. бирелде. Артабан ифрат тәрән йөкмәткеле, күңелдәрҙе әсир итерлек сихри мондары менән сығыш яһанылар колледжыбыҙҙың патриотик рухлы студенттары. Бигерәк тә 32-се төркөм студенты Алмаздың йырҙарын тамашасылар яратып тыңланылар. Шулай уҡ 42-се төркөм ҡыҙҙары Ә.Йәмәлиева һәм А.Исхаҡованың бейеүҙәре күңелдәрҙе дәртләндереп ебәрҙе. Кисәлә милләттәр дуҫлығы тураһында һүҙ барҙы. I курс студенты үҙе сығарған Туҡайға бағышлаған шиғырын уҡып ишеттерҙе. Бына ошондай матур йыр-мондарға уралып Башҡортостандың тыуған көнөнә арналған кисә үтеп тә китте.

**Мырҙағолова Т. 42-се төркөм студенты**

### *Ололарға - оло хөрмәт*



Октябрь башында республикабыҙҙа Ололар көнө билдәләнә. Беҙҙең колледжда ла был байрамды билдәләп үтеү йолаға әйләнеп китте. 52-се төркөм, уларҙың кураторҙары Гөлнара Яхъя ҡыҙы етәкселегендә кисәне үткәрҙе. Унда оло инәй-бабайҙар саҡырылды. Уларҙың ҙур хеҙмәттәре, беҙҙең өсөн, киләсәк быуын өсөн эшләгән эштәре лайыҡлы баһаға эйә. Байрам кисәһендәге бөтә матур һүҙҙәр оло инәй һәм ағайҙарға бағышланды. Байрамды И.Мөтиғилуна менән Г. Ибатуллина алып барҙы. Студенттар үҙҙәренең иң изге теләктәрен йыр-бейеүгә бәйләп еткерҙеләр. Алсу һәм Диана Муллагалиналар, М.Гәлимов, А.Зәйҙуллин, 52-се төркөм студенттарының йырҙарын тамашасылар ихлас күңелдән ҡабул иттеләр. Г.Мөфтәхова һәм Г.Зәйнуллина, А.Исхакова бейеүҙәре күңелдәргә дәрт һәм көс өҫтәне. Ололарға ҡыҙыҡлы һорауҙар бирелеп бик йәнле һөйләшеү үткәрелде. Ысынлап та, уларҙан бик күп фәһем һәм тәжрибә алып була.Ә кисә һуңынан ҡунаҡтарҙы йылы сәй менән һыйланылар. Был кисәнән бөтәһе лә ҡәнәғәт ҡалдылар.

## *һынау дәрестәре башланды...*



Быйыл 4-се курс студенттары Туймазы ҡалаһының 6-сы һанлы мәктәптә практика үтә башланылар. Бер-нисә һынау дәрестәре үткәргәс, беҙ уларҙың алған тәьҫораттары менән уртаҡлашырға булдыҡ һәм бер-нисә һорау биреп үттек. Студенттарҙың бөтәһенә лә тиерлек уҡытыусы эше оҡшаған. Шулай ҙа ҡайһы берәүҙәргә оло кластарҙа дәрес үткәреүе ауырыраҡ булып, бәләкәйҙәргә еңел бирелһә, ҡайһыларына киреһенсә. Ә бына Хәйертдинова Зөлфиәгә һынау дәрестәре оҡшаған: "Миңә дәрестәр үткәреүе, балалар менән аралашыуы оҡшаны. Улар теманы аңлап яуап биреп ултырһалар дәрес күңелле үтә. Балалар тыңламаһалар дәрес үткәреүе бик ауыр. Мин был практиканан күп нәмәгә өйрәндем һәм артабан да булған етешһеҙлектәремде бөтөрөргә тырышам". Студенттар араһында төшөнкөлөккә бирелгәндәр юк. Методист һәм уҡытыусы кәңәштәренә таянып дәрестәрен ҡыҙыҡлы, бай йөкмәткеле итеп үткәреүҙәрен дауам итәләр. Уларға артабан да ижади уңыштыр теләп ҡалабыҙ.

**Моратшина Ләлә, 42-се төркөм**



## *Хәтер кисәһе...*

Туймазы районында тыуып-үҫкән әҙәби тәнҡитсе, әҙәбиәт белгесе булған С.Ғ. Сафуановҡа бағышланған хәтер кисәһе беҙҙең колледжда үтте. Әҙипкә быйыл 80 йәш тулған булыр ине. Кисәгә унын ҡәләмдәштәре, журналистар, әҙәбиәт һөйөүселәр, ҡәрҙәштәре, туғандары килде. Әҙип тураһында йылы һүҙҙәр, иҫтәлектәр һөйләнелде. С.Сафуановтың дуҫтары Ҡәҙим Аралбай,Сабир Шәрипов, Марис Нәзиров үҙҙәренең шиғырҙарын уҡынылар, бергә булған ваҡыттарын иҫкә төшөрөп, уй-кисерештәре менән уртаҡлаштылар. Ҡаланың үҙәк-ара китапханаһы етәксеһе Әлфиә Ҡәйдүс ҡыҙы, Педагогия колледжының башҡорт теле уҡытыусыһы Гөлнара Яхъя ҡыҙы, ҙ-се мәктәптең татар теле уҡытыусыһы, татар теле уҡытыусыларының методик берләшмәһе етәксеһе Розалиә Рәис ҡыҙы С.Сафуанов тураһында бик матур докладтыры менән сығыш яһанылар. Килгән ҡунаҡтарға колледж һый-хөрмәт күрһәтте: икмәк-тоҙ менән ҡаршы алып, йылы сәй ҙә эсерҙеләр. Китапханаға инеп яңы китаптар бүләк итеп сыҡтылар. Йыл һайын колледжда төрлө яҙыусылар менән осрашыуҙар булып тора. Был осрашыу ҙа беҙгә оҡшаны һәм ошондай кисәләр ойошторолоп, оло әҙиптәребеҙҙе онотмаһалар ине тигән теләктә ҡалабыҙ.



## Уkытыусылар көнө



*Беҙҙең бүлек студенттарына Уkытыусылар көнөндә уkытып kарау мөмкинселегe бирелде. Улар төрлөһө төрлө фәндәрҙән студенттар менән эшләп kаранылар һәм улар үҙҙәренең тәьсораттары менән уртаkлашалар.*

**Ишинбаева Людмила:** Уkытыусы элек-электән ҙур роль уйнаған. Уның һөнәре еңелдән түгел. Был кеше түҙемле, һәбарған дисциплинаны белгән кеше. Уkытыусы булыу бик еңел тиҙәр, kырҙан kарағанда ғына шулай күренәлер ул. Ләкин иртән мәктәпкә барып, белемен балаларға дөрөҫ итеп еткереү, иртәндән кискә тиклем эшләү, kайтып тағы ла дәфтрҙәрҙе тикшереү, план-конспкт яҙыу... Уның янында ғаилә лә бар бит әле. Бик ауыр эш ошо яkшы кешеләргә тура килә. 5 октябрь көндә беҙҙең педагогия колледжында байрам булды. Беҙ ҙә уkытыусыларҙы kотланыk. Студенттар үҙҙәре ошо көндө дәрес бирҙеләр. Мин III курс, “Туған тел һәм әҙәбиәт” бүлегендә уkыған төркөмдә стилистика менән каллиграфия дәрестәрен алып барҙым.Стилистика дәресендә беҙ М.Кәримдең шиғырҙарына анализ эшләнек. Каллиграфияла уkыусылар менән беренсе төркөм хәрефтәрен үттек. Минә бик тә оkшаны студенттар менән эшләү. Ошо көндө үҙемде уkытыусы итеп тойҙом. Ләкин уkыусыларға белем биреү өсөн, үҙебеҙгә күберәк уkырға, үҙебеҙҙең әҙәбиәтебеҙҙе тәрәнерәк өйрәнергә кәрәк. Мин уkытыусыларға бик рәхмәтлемен. Уларға түҙемлек, таҙалыk, оҙон ғүмер теләйем. Ҙур рәхмәт!

**Хәмиҙуллина Динара**: Уkытыусы һөнәре — ул иң кәрәкле, иң гүзәл, шул уk ваkытта бик ауыр ҙа, kатмарлы ла һәм яуаплы һөнәрҙәрҙең береһе.. Уkытыусылар туған телебеҙгә kарата һөйөү, милләткә ихтирам уяталар. Уkытыусы булыу — ул минең бала саk хыялым. Бала килеш кенә күңелемдә “Уkытыусы булам”, - тигән уй яралды. Әлеге ваkытта мин оло талпыныу менән ошо хыялыма ашkынып барам. Бына уkытыусылар көнө лә үтеп китте. Был көндө беҙҙең колледжда дәрестәрҙе үҙ һөнәренә ирешеүсе студенттар алып барҙы. Улар араһында мин дә булдым. Туған тел бүлегендә уkып йөрөүсе 22-се, 32-се төркөм студенттарында башkорт теле дәресен алып барҙым. Улар менән аралашыуы минә kыйынлыkтар килтермәне. Студенттар шаулашмайынса, тыныс kына минең аңлатkандарымды тыңлап ултырҙылар. Аҙаk беҙ бергәләшеп практик эштәр башkарҙыk. Парта артында һынап та, яратып та, kыҙыkһынып та төбәлгән студенттарға kарап, башымда төрлө уйҙар килеп тыуҙы. Ошо минуттарҙа мин үҙемде ысын уkытыусы итеп тойҙом. Миндә уkытыусыға хас сифаттар уянды. Быға тиклем ошо һөнәрҙең ҙур яуаплылыk, оло сабырлыk талап иткәнен аңлап етмәгән булғанмын икән. Ә хәҙер инде уkыусылар алдында үҙенде нисек тоторға, уларға ваkытында ярҙам итергә, сабыр булырға кәрәклеген аңланым. Үҙемә кәрәкле, файҙалы мәғлүмәттәр алдым. Һәм киләсәктә уkыуымды яkшы ғына билдәләргә тамамлап, kулыма диплом алып, яkты, матур мәктәптә балалар алдына баҫып тороуыма, ауырлыkтар алдында баҙамай, һәр саk тик алға ынтылырға тигән өмөттә kалам.




**Камалетдинова Гөлназ:** Уkтыусылар көнөндә беҙҙең Туймазы педагогия колледжында уkытыусыларға ял бирелде. Һәм уkытыусылар урынында IV, V курс студенттары дәрес биреп йөрөнөләр. Шулар араһында мин дә бар инем. Ул көндө мин социалогия уkытыусыһы Дилә Фәүзи kыҙы урынында үҙебеҙҙең 42-се төркөмдә дәрес алып барҙым. Дәрес үткәреүе минә оkшаны. Иң башта кем юkлығын тикшереп үттем, унан һуң яңы темаға конспект яҙҙырҙым. Бер дәрес шулай итеп үтеп тә китте. Матур беренсе дәрес хәтирәләре генә kалды.



## *Минең йәйге каникулым*

Июнь айының аҙаҡтарында һуңғы имтиханымды тапшырып бөткәс, йәйге каникулға, үҙемдең тыуып-үҫкән ауылыма – Мораҙымға ҡайтырға сыҡтым. Ярты йыл буйы күрмәгән урман-тауҙар уратып алған тыуған яғымдың үҙенә тартыуы шундай көслө, хатта көнө буйына ҡайта торған оҙон юлда арығанлығым да һиҙелмәне. Ауылға килеп ингәс, күңелгә, бала сактан яҡын булған үҙ яғымдың саф һауаһы аша, ниндәйҙер йылы хистәр килеп инә. Күктә бер бөртөк болот әҫәре лә күренмәй, байыуға табан барған ҡояш туктауһыҙ йылы нурҙарын һибә. Шул вакыт иҙелдә һыу инеп йөрөгән күмәк балаларҙы күрәм. Эҫелеккә сыҙамайынса сумкамды яр буйына ҡуйып һыу инергә төштөм. Оҙаҡ ҡына һыу ингәндән һуң, күрше малайҙы осратып уның менән һөйләшә-һөйләшә өйгә ҡайттыҡ. Ата-әсәйемдәр шатланып ҡаршы алдылар. Күмәкләп ултырып сәй эстек.Атайым тиҙҙән бесән башланасағы тураһында һөйләгәндән һуң, йылмайып миңә ҡарап, “Ҡыштың ҡыш буйы ҡалала ял итеп ҡайттың бесәнде беҙгә үҙең генә эшләп бирерһең инде, беҙ ял итербеҙ” – тип шаярта. Дүрт көн буйы ауылдаштар менән күрешеп, ял итеп яттым. Бишенсе көндө иртәнсәк атайым уятып бесәнгә алып китте. Бесән үҙе ауыр эш булһа ла, ялҡытмай ине. Ҡоштар һайрауына күмелгән урман ситендә генә бесән эшләйбеҙ. Атайым трактор менән сапҡан бесәндетейәп ауылға ташыйбыҙ. Эше оҙаҡ булмаһа ла, атйым ашарға алып йөрөй. “Урманда сәй тәмле була ул, һин ҡалала ятаҡта бындай сәйҙе эскәнең юктыр әле”, - тип йылмая. Бына шулай күңелле генә йөрөп бесән эшләп каникулымдың бер айы һиҙелмәй ҙә үтеп китте. Каникулымдың һуңғы айы ауылдағы вак эштәр менән, ял итеү менән үтеп китте. Тыуған яғым менән хушлашыуы ауыр булһа ла, тағы ярты йылға Туймазыға уҡырға киттем.



***Моратшин Ф. 42-се төркөм***

## *Йәйге хәтирәләр*

Йәй һәр баланың, йәштәрҙең көтөп алған миҙгеле. Ни өсөндөр йәйгелек булған вакиғалар күңелдә оҙаҡ һаклана. Айлы төндә урамда йөрөгәндә күңелде ниндәйҙер аңлайышһыҙ хистәр солғап ала. Ләкин ниңәлер ошо кисерештәрҙе кағыҙ биттәренә күсереп кенә булмай. Был хистәр тәүге кар яуғансы йөрәктә һакланһа-һаклана, әммә тышка бәреп сыкмай. Бындай кисерештәр урманға еләк-емеш йыйғанда ла, йылғала һыу кергәндә лә, ауылыбыҙҙың бейек тауына менеп бөтә ғәләмде күҙәткәндә лә йөрәктәрҙе семетеп-семетеп ала, күңелдәрҙе рухландырып, дәрт уятып ебәрә... Каникулымды фәһемле итеп үткәрергә тырыштым. Ҡыҙғаныска ҡаршы, миңә бесәнгә йөрөргә тура килмәне. Әммә еләк-емешкә йөрөү бәхете тейҙе. 12 км алыҫлыҡта әсәйем, еңгәләр менән көртмәлегә йөрөнөк. Унда бик ҡыҙыҡ булды. Еңгәләр менән шаяра-шаяра ҡайтҡас, арығанлыҡ та һиҙелмәй. Ҡайһы сакта беҙҙең менән оло инәйҙәр ҙә барғыланы. Уларҙың һөйләгәндәрен ситтән генә тыңлап йөрөйөм дә үҙемсә фекер йөрөтәм, үҙемә фәһем алам. Инәйҙәрҙең ауыр тормошон бөгөнгө менән сағыштырам, һығымталар сығарам. Шулай: ҡулым еләк йыя, ә башымда икенсе уйҙар. Көртмәле урманы бик ҙур. Мин башҡаларҙан айырылып ситтәрәк йөрөргә яратам. Берәү ҙә ҡамасауламай, хыялдарынды, уйынды бүлдермәй. Көртмәле урманынан яланға сыкһам, бер бәләкәй балаға әйләнгем килә, ә унан яландағы төрлө-төрлө сәскәләр араһында йүгереп уйнарға... Бер үҙем булһам, биллаһи, шулай итер инем. Кешеләр булғас уңайһыҙландыра. Урмандан арып ҡайтҡас, йүгереп һыу буйына төшөп китәбеҙ. Һыу инһәм бөтә арыуҙар ҡул менән һыпырып ташлағандай юк була. Шулай йәйге каникул һиҙелмәй ҙә ҡала инде.

***Моратшина Л. 42-се төркөм***

## *Нимә ул мөхәббәт?*



Мөхәббәттең иң kыçkа аңлатмаhы шундай: мөхәббәт — ул kабул итеү. Ул донъяны kабул итеү һәм аңлауҙың үҙенә күрә бер ысулы. Мөхәббәт — ул һөйөү, яратыу. Мөхәббәт кешеләр күңеленә үтеп кереп, хатта туң йөрәктәрҙе лә эретерлек бөйөк көс ул. Был көс донъяға кеше менән бергә тыуған. Кеше йәшәһә, мөхәббәт тә йәшәйәсәк. Мөхәббәт яҙғы күкрәү булып килеп инергә мөмкин. Ул иçертә, аkылдан яҙҙыра, һалkын kорал менән йөрәгеңә kаҙай. Саф мөхәббәт тормошkа төçтәр, хистәргә бай яңы эстәлек бирә. Ғашиkтарҙы бөйөк эштәргә этәрә, яңғыҙлыkтан kотkара, күңел яраларын дауалай һәм алмашkа бер ни ҙә талап итмәй. Эйе, беҙ төрлөбөҙ төрлөсә яратабыҙ. Мөхәббәтте төрлөсә аңлайбыҙ. Әммә һәммәбеҙҙең ятатаhыбыҙ һәм яратылаhыбыҙ килә. Был — беҙҙең уртаkлыk. Глобаль йылыныу боҙҙарҙы иретә ала, бөтә ер шарында климат үҙгәрергә мөмкин. Әммә кеше тигән бөйөк зат өсөн “Мин hине яратамӘ” тигәнде ишетеүҙән дә бигерәк тәçирерәк башkа күренеш юk. Был — ер тигән планетала иң ҙур мөғжизә. Мөхәббәт тере йән hымаk, йәғни тыуа ла, үлә лә ала. Мөхәббәт hынауҙары hөйөү килтергән шатлыk һәм ғазаптар, ярата белгәндәрҙең бәхетле һәм аяныс яҙмыштары уйландырыр, моңландырыр. Үкенесле булмаhын. Ғүмерҙәр мөхәббәт хисен татымай үтмәhен. Яратығыҙ һәм яратылығыҙ!

***Мостафина Ю. 42-се төркөм***

## *Ауылда йәйге иртә*

Их, бигерәк йәмле шул башkорт ауылдарында йәйге иртә. Татлы йоkонан уянып торhаң, күңелдәргә йылы тула, матурлыkkа hokланып, тәбиғәттең иç киткес тауыштарына тыңлап туя алмайhың.Йылы, хуш еçле йәйге иртәлә ишек алдына сыkhаң, kолаkkа ниндәй генә тауыштар ишетелмәй. Ҡояш kалkыу менән, йәм-йәшел ағастарҙа kоштарҙың тауыштары kолаkkа сағыла: сут-сут, фю-фю, фит-фит-фит. Оҙаk kына kоштарҙың йырлауын тыңлап торhаң, был kанатлы дуçтарыбыҙ kояш сығыуына шатланып йырлаған hымаk. Ҡоштарҙың тауыштарын иртәнге таң менән тороп тыңлауы күңелдә булған уйҙарҙы оноттора, шатлыk тыуҙыра.Ем-ем итеп иртәнге kояш йылмая. Ағас япраkтарында иртәнге нурҙар hикергеләп уйнай. Ер өçтөндә шундай матурлыk: йәм-йәшел үләндәр kояшkа үреләләр, улар хуш еçле сәскә атkандар, ошо үләндәр араhында ысыk тамсылары ялт-йолт итеп күҙгә күренәләр.Тәбиғәттең был матурлыkтарына hokланып туйғас, мин ауылыбыҙҙың яр буйына барып сылтыр-сылтыр шишмә сыңын тыңларға яратам. Шишмәнең көмөш сулпылар hымаk сылт-сылт итеп ағыуын тыңлағанда йәрәгемдә туk-туk итә. Шишмәнән саk kына ситкә китһәң тәбиғәттең күренештәренә, тауыштарына йөнең-тәнең менән сумаhың. Аллы-гөллө сөскәләр араhында башың әйләнә башлай. Ошо сәскәләр өçтөндә бал kорттары, төрлө-төрлө күбәләктәр осоп йөрөйҙәр. Уларҙы нығыраk тыңлаhаң иç киткес матур тауыштар ишетелә: беҙҙ-беҙҙҙ, геүүү, жжжж..... Был тауыштар бөтәhе лә бергә kушылhа, kолаkkа оркестр моңо hымаk мондар ишетелә.Бер уйлаhаң, ауыл ошо ваkытта ниндәй тын, ә ысында был ваkытта тәбиғәттең шул тиклем матур, hokланғыс тауыштарын ишетергә була.Ауылдың йәйгә иртәhенә hokланып, бейеkkә-бейеkkә йөҙөп менеп, kояш нурҙарына сумып, тәрән уйға батыр ғүмеремдәге выаkиғалар тураhында уйланаhы, шырkылдап köлəhе, күkkә осаhы килә.

***Шәйхутдинова Э. 42-се төркөм***



Таныштайык!

*Быйыл беҙҙең колледжға бик күп яңы студенттар килде. Уларҙың күбеһе I, II курс студенттары булһа, III курска килеүселәр ҙә бар. Ысын күңелдән уларҙы, студенттар булып китеүҙәре менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Колледждың, ата-әсәләренең, уҡытыусыларҙың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй, яҡшы билдәләргә генә тамалауҙарын теләп ҡалабыҙ. Килеүҙәренә ө ай ғына үтһә лә, улар үҙҙәренең һәләттәрен күрһәтеп өлгөрҙөләр инде. Шуларҙың береһе - 32-се төркөм студенты Зәйҙуллин Алмаз. Ул беҙҙе матур, һоҡландырғыс йырлауы менән үҙенә йәлеп итте. Һеҙҙе лә уның менән яҡындан таныштырып китмәксебеҙ. Ул үҙе хаҡында бына нимәләр һөйләй:*

Мин Башҡортостан Республикаһының хозур тәбиғәтле Шаран районы Дүрмән ауылында тыуып-үҫтем. Бала сағым ошо ауылда үтте. Бәләкәй саҡтан уҡ, үҙемдең тыуған ауылыма ҡарата һөйөү хисе һаҡланым, уны ысын күңелдән һөйҙөм, яраттым. Буш ваҡыттарҙа төрлө китаптар, гәзит-журналдар уҡырға ятатам. Гәзит-журналдарҙа яңылыҡтарҙы уҡырға ынтылам. Китаптарға килгәндә, мин бигерәк тә үҙебеҙҙең башҡорт шағирҙарының, яҙыусыларының әҫәрҙәрен яратып, илһамланып уҡыйым. Уларҙан мин үҙемә кәс-дәрт, кәрәкле мәғлүмәт алам. Шулай уҡ спорт уйындарын ятатам. Бигерәк тә футболды, хоккейҙы яратып уйнайым. Мин уларҙы шулай уҡ телевизорҙан яратып ҡарайым. Ошо спорт төрҙәренең ысын көйәрмәне.

Мин йырларға бик яратам. Сөнки йыр күңелде күтәрә, кешене алдағы эшләнәсәк эшенә илһамландыра, рухландыра. Сәләмәт тормош алып барам. Сөнки кешегә иң кәрәк нәмә ул – сәләмәтлек. Сәләмәт, таҙа булһаң һине бер ниндәй ҙә уйҙар борсомай. Әгәр һин донъяла матур итеп йәшәйем тиһәң, сәләмәт, таҙа тормош алып бар. Ғаиләлә мин бер бала. Әсәйем мине үҙенең бар булған наҙын, һөйөүен биреп үҫтерҙе.

Салмалы урта мәктәбендә уҡыған ваҡытта уҡ минең яратҡан фәндәремдең береһе башҡорт теле булды. Мин ошо фәнде ысын күңелдән яратып уҡыным. Уның буйынса төрлө район олимпиадаларына барҙым һәм призлы урындар ғына яуланым. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресен уҡытҡан уҡытыусым Минивәлиева Гөлсинә Шәрипйән ҡыҙына ысын күңелдән рәхмәт һүҙҙәрен әйтәһе килә. Сөнки ул миңә ошо телгә ҡарата һөйөү, яратыу тәрбиәләне. Шуға күрә, мәктәпте уңышлы ғына тамамлағас, минең уйым башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булды. Ошонан һуң мин Туймазы педагогия колледжының башҡорт төркөмөнә уҡырға индем. Әлеге ваҡытта ошонда уҡып йөрөйөм. Алла бойорһа, минең алдағы маҡсатым башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булыу, балаларға ғилем, аң-белем таратыу.

**М.Аҡмуллаға бағышлап**

Мифтахетдин Аҡмулланың
Яратам шиғырҙарын.
Эстәлеге аңлайышлы
Йөкмәткеле үҙҙәре.

Әйҙәй ул белем иленең
Ишектәрен асырға.
өмөт менән бейек тауҙың
Үрҙәренә осорға.

Яҡшылыҡтың,
яманлыҡтың
Ни икәнен белергә.
Тыуған илдең,
тыуған телдең
Ҡәҙерҙәрен белергә.

**Муллаянова Р.**



**Гәзитте ойоштороусы:** Кәримова Г.Я.
**Баш мөхәррир:** Моратшина Л.Ф.